# СИРҘӘН СИХӘТТӘРЕ БАР



*Әхмәҙуллин Роберт Вафа улы 1950 йылда Мәсетле районының Ҡотош ауылында тыуған.*

*Башкорт дәүләт медицина институтын тамамлағандан һуң Павловка дауаханаһында баш табип булып эшләй. 1975 йылда уны Мәсетле районы дауаханаһына хирург итеп күсерәләр. Артабан ул Яңауыл районында — баш табип, Өфө район дауаханаһында баш табип урынбаҫары булып эшләй, 1987 йылда «Йоматау» шифаханаһының баш табибы итеп тәғәйенләйҙәр. Әлеге көндә Р.В.Әхмәҙуллин «Зеленая роща» шифаханаһын етәкләй.*

*Р.В.Әхмәҙуллин — медицина фәндәре кандидаты, Башкортостан Республикаһының атҡаҙанған табибы, СССР-ҙың һаулык һаклау отличнигы, курорт тармағы отличнигы.*

Башҡортостанда байтаҡ сихәтле һыу сығанаҡтары, дауалау өсөн ҡулланылған балсыҡ ятҡылыҡтары, көкөрт-водородлы, хлорид-натрийлы һәм башҡа минераль, уникаль термаль газ һәм пар сығанаҡтары, уңайлы климат зоналары булып, улар нигеҙендә тиҫтәләгән шифахана эшләп килә. Башҡортостан Республикаһының профсоюздар системаһында өлкәндәр өсөн биш, балалар өсөн бер махсус шифахана һәм дүрт ял йорто бар. «Зеленая роща» шифаханаһы шуларҙың иң данлыҡлыһы.

«Зеленая роща» шифаханаһы Өфөнөң көньяҡ-көнсығыш ситендә, Ҡариҙел йылғаһынын уң яҡ ярындағы ҙур паркта урынлашҡан. Ул 1967 йылда асылған һәм 1 мең кешегә иҫәпләнгән. Шифаханала кардиологик (шул иҫәптән миокард инфарктын кисергәндәрҙе), гематологик сирҙәрҙән һәм нерв системаһы ауырыуҙарынан дауалайҙар. Бальнеологик процедуралар (йодбромлы, углекислоталы, ылыҫлы һәм «ынйы» ванналары, дауалау душы), диета, «Нурлы» минераль һыуы (кальцийсульфатлы был һыу шифахана территорияһындағы скважинанан алына), психотерапия, гипноз, электройоҡо, дауалау физкультураһы, массаж, электр яҡтыһы менән дауалау ҡулланыла. Йөҙөү бассейны, дауалау гимнастикаһы һәм спорт күнекмәләре өсөн физкультура залы, һыу эсеү бюветы, аэросолярий, терренкур маршруттары бар.

Клиник, биохимия лабораториялары, функциональ диагностика, рентген һ.б. кабинеттар эшләй.

«Зеленая роща» шифаханаһының баш табибы Роберт Вафа улы Әхмәҙуллин менән әңгәмәлә беҙ заманыбыҙға хас, күптәребеҙҙе борсоған һорауҙарға яуаптар эҙләнек.

**— Роберт Вафич, башҡа төбәктәрҙә шифаханалар, унда дауаланыусылар һаны ҡырҡа кәмегән бер мәлдә Башҡортостанда һаулыҡ һаҡлау өлкәһенә иғтибар арта, шифахана, дауаханаларға реконструкция үткәреү йылдам дауам итә. Ошо хаҡта һеҙҙең фекерегеҙ?**

— Эйе, республикабыҙҙа халыҡтың һаулығын һаҡлауға ҙур иғтибар бирелә. Был иһә Башҡортостан Президенты М.F.Рәхимовтың, республикабыҙ хөкүмәтенең уйланылған сәйәсәте нигеҙендә мөмкин булды.

Быны беҙҙең «Зеленая роща» шифаханаһы миҫалында ла күрергә мөмкин. Әле беҙ шифаханаға реконструкция үткәреүҙең махсус планын әҙерләнек. Ул ғына ла түгел, был эш башланды ла. Социаль страховкалау фонды ярҙамында һыу менән дауалау үҙәгенә реконструкция үткәреүгә тотондоҡ. Артабан аҙыҡ-түлек әҙерләү блогын яңыртырға, шифахана эргәһендә поликлиника булдырырға ниәтләйбеҙ. Эшләйһе эштәр етерлек. Иң мөһиме, улар барыһы ла ял итергә килеүселәргә уңайлы булһын өсөн атҡарыла.



09-2001.p65 191 29.08.01, 13:19
Black

Был объекттарҙы төҙөү нигеҙҙә дәүләт социаль яҡлау фонды, республика предприятиелары һәм учреждениелары фондтары иҫәбенә алып барыла.

**— Роберт Вафич, әлеге көндә күптәр өсөн шифаханала ял итеү хыял ғына булып ҡала...**

— Әлбиттә, шифаханаларға путевка хаҡы заман һулышына бәйле. Элек, уртаса эш хаҡы 60-80 һум булған заманда, ял йортона, шифаханаларға путевканы 120 һумға алырға мөмкин булған. Өҫтәүенә профсоюз комитеттары ла ярҙам күрһәтеп, путевканың 30-70 процентын профсоюз ойошмаһы түләй ине. Ә хәҙер 21 көн ял итергә теләгән кеше кәм тигәндә 5-6 мең аҡса табырға тейеш. Был һәр кемдең дә хәленән килмәй, әлбиттә. Дөрөҫ, һуғыш һәм хеҙмәт ветерандары өсөн 30-70 процентҡа ҡәҙәр ташламалар ҡаралған, әммә был ғына мәсьәләне хәл итеп бөтмәй.

Әммә бында шифаханаларҙың ғәйебе аҙ. Әйткәндәй, «Зеленая роща» шифаханаһына путевкалар хаҡы иң арзандарҙың береһе һанала. Халыҡҡа путевкалар хаҡын кәметеү — дөйөм хөкүмәт эше. Әйтәйек, аҙыҡ-түлектең хаҡы баҙар хаҡтарына бәйләнгән. Амортизация нормаларын — хөкүмәт, газ, электр энергияһы, яғыулыҡ-майлау материалдары өсөн хаҡты уларҙың хужалары билдәләй. Дөйөм алғанда, сығымдарҙың 70 проценты шифаханаға бәйле түгел.

Был йәһәттән льготалы путевкалар менән тәьмин итеүҙе яйға һалыу мөһим, тип уйлайым. Мәҫәлән, 1996 йылға тиклем шифаханаларҙа 1,5—2 мең һуғыш ветерандары, инвалидтары, хеҙмәт ветерандары ял итә торғайны, һуңғы йылдарҙа иһә уларҙың һаны ике-өс йөҙҙән артмай.

Әлбиттә, беҙ үҙебеҙ ҙә ял итеүселәр күберәк килһен өсөн бөтә тырышлыҡты һалабыҙ. Мәҫәлән, әлеге ваҡытта шифаханаларға элекке кеүек 24 көнгә генә түгел, 21, 18, 15, 12 һәм 6 көнгә лә путевка һатып алырға мөмкин. Балалар өсөн махсус льготалар ҡаралған. Әммә шуны әйтергә кәрәк, шифаханалар путевка хаҡын төшөрөү йәһәтенән артыҡ күп нәмә эшләй алмай.

**— Шулай булыуға ҡарамаҫтан, ял итергә теләүселәр етерлек. Уларҙы хеҙмәтләндереүҙе камиллаштырыу, яңы ҡорамалдар һатып алыу йәһәтенән низәр эшләнә?**

— Шифахана коллективы, һәр төрлө ҡыйынлыҡтарға ҡарамайынса, күптәнге традицияларҙы дауам итә. Дауаланыусылар ашханала туҡланыу сифатының яҡшы, табиптар һәм шәфҡәт туташтарының итәғәтлелегенә, палаталарҙа, дауалау бүлмәләрендә даими таҙалыҡ һәм тәртип булыуына рәхмәт әйтәләр.

Әйткәндәй, шифаханала дауалаусы туҡландырыу ысыулы ҡулланыла. Был иһә комплекслы дауалауҙың бер төрө. Ял итеүселәр ашханаға үҙҙәре теләгән ризыҡҡа алдан заказ бирә. Беҙҙең ашнаҡсылар 400-ҙән ашыу аш төрө һәм эсемлек әҙерләй.

Шифаханала кардиореабилитация һәм дауалау-диагностика бүлектәре уңышлы эшләй. Медицина хеҙмәткәрҙәре заманса ҡорамалдар нигеҙендә бик күп диагностика, профилактика һәм дауалау төрҙәрен файҙалана. Шифахана территорияһында быраулаған 540 метр тәрәнлектәге ике скважинанан алынған көкөртлө-водородлы һыу минераль составы буйынса «Усть-Качка» һәм «Мацеста» курорттарындағыға оҡшаш һәм дауалау сараһы буларак киң ҡулланыла.

Бынан тыш шифахананың «Нурлы» минераль һыуы ла ашҡаҙан-эсәк ауырыуҙарын дауалауға булышлыҡ итә.

Физик күнекмәләр менән дауалау ҙа киң ҡулланыла. Төрлө тренажерҙары булған спорт залы һис кенә лә буш тормай. Мануаль терапия кабинеты эшләй, төрлө массаж төрҙәре тәҡдим ителә. Дауаланыусыларҙың байтағы һыу менән дауаланыуҙы өҫтөн күрә. Табиптар уларға радонлы, ылыҫлы ванналар, циркуляр, «ямғырлы» һыу ағымдары менән дауалауҙы тәғәйенләй. Остеохондроз, полиартриттан ыҙаланған, умыртҡа һөйәге һыҙлаған кешеләргә һыу эсендә массаж яһау ыңғай тәьҫир итә. Фитобарҙа иһә һеҙгә төрлө урман үләндәре һәм ялан сәскәләренән эшләнгән, хуш еҫе аңҡып торған эсемлектәр тәҡдим итәсәктәр.

Кино, тамаша залдарында ял итеүселәрҙең күңелдәрен күтәрерлек мауыҡтырғыс саралар үткәрелә. Бында шағирҙар, артистар, йырсылар йыш килә, осрашыуҙар бик тә йылы шарттарҙа үтә.

Беҙҙең шифаханала ял итеүселәр өсөн тағы бер ыңғай яҡ: ул Өфөнөң үҙендә урынлашҡан. Теләгән ваҡытта башҡалабыҙҙағы театр тамашаларын ҡарарға, концерттарға йөрөргә, музейҙарға барырға, иҫтәлекле урындар менән танышырға мөмкин. Бынһы инде ял итеүсенең зауығына бәйле.

Ҡыҫҡаһы, «Зеленая роща» шифаханаһы ял итергә теләүселәргә һәр саҡ көтөп ала.

*Зөһрә Алтынбаева әңгәмәләште.*



09-2001.p65 192 29.08.01, 13:19
Black